## 6–сы практик эш

**Темаһы:** Минең буласаҡ һөнәрем. Моя будущая профессия.

**Башҡарыласаҡ эш төрҙәре:** һөнәри һүҙҙәрҙе, синоним, антонимдарҙы ҡулланыу буйынса практик биремдәр башҡарыу.

**Наименование работы:** выполнение практических заданий на применение синонимов и антонимов, профессиональной лексики.

**Маҡсат:** һөнәрҙәр тураһында әңгәмәләшеү, профессиональ һүҙҙәрҙе ҡулланыу буйынса күнекмәләр булдырыу. **Ваҡыт нормаһы:** 2 сәғәт.

**Әҙәбиәт:** 1.Усманова М.Ғ., Солтанғолова З.З. Башҡорт теле: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған һөнәри белем биргән ойошмалар өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: Китап, 2015.

### Техник хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре:

1.Эште инструкцион – технологик карта буйынса башҡарырға.
2.Эш урынын тәртиптә тоторға. 3.Кеҫә телефондарын һүндерергә.

### Инеш инструктаж(письменно)

**1.Һүҙлек:**

һөнәр – профессия　　һөнәри – профессиональный
һөнәри һүҙҙәр – профессиональная лексика　эш хаҡы – заработная плата
иҡтисади – экономический　кәрәкле – нужный　аҡса – деньги
аҡсалата – деньгами　буласаҡ – будущая　мәҫәлән – например
төрлө – разный　әхирәт – подруга　белем ала – получает знание, обучается
үҙләштерә – получает профессию　иретеп йәбештереүсе - сварщик
уҡыу йорто – учебное заведение　ташсы - каменщик

2. Грамматик материал дәреслектең 164 - 165 – се биттәрендә:

### Эш башҡарыуҙың йөкмәткеһе һәм эҙмә – эҙлелеге:

**1-се бирем.** Тексты тәржемә итегеҙ (Переведите текст. Определите, какими словами являются выделенные слова):

### Минең яраткан уҡыу йортом.

Мин Гүзәл Ғүмәрова. 9 – сы класты тамамлағас, Наумовкалағы Стәрлетамаҡ тармаҡ – ара колледжына уҡырға индем. Хәҙерге ваҡытта 2 – се курста “Иҡтисад һәм бухгалтер иҫәбе” специальносы буйынса уҡыйым. Бында уҡырға миңә бик оҡшай. Буласаҡ һөнәремде лә яратып һайланым. Колледжды тамамлағас, Башҡорт дәүләт аграр университетына уҡырға барам.

Минең дуҫтарым төрлө колледждарҙа һәм техникумдарҙа уҡый. Мәҫәлән, әхирәтем Алина Стәрлетамаҡ химия – технология колледжында **белем ала.** Ул буласаҡ технолог. Лилиә Өфөнөң педагогия колледжында **уҡый.** Уның буласаҡ һөнәре – музыка уҡытыусыһы. Айнур Мораҡ ауылындағы 90 – сы профессиональ лицейҙа иретеп йәбештереүсегә уҡый, ә Марат Өфөлә ташсы **һөнәрен үҙләштерә.**

Беҙгә барыбыҙға ла һайлаған һөнәрҙәр һәм уҡыу йорттары оҡшай.

**2 – се бирем.** Һорауҙарға яуап бирегеҙ, яуапты текстан табығыҙ **(** Ответьте на вопросы по тексту первого задания **по образцу):**

1.Гүзәл ҡайҙа уҡый? Гүзәл Стәрлетамаҡ тармаҡ – ара колледжында белем ала.2.Гүзәлдең специальносы ниндәй? 3.Алина ҡайҙа уҡый? 4.Лилиәнең буласаҡ һөнәре ниндәй? 5. Айнур менән Марат ҡайҙа уҡыйҙар?

**3 – сө бирем.** Диалогты күсереп яҙығыҙ, нөктәләр урынына хәрефтәр ҡуйығыҙ (Спишите диалог, поставив вместо точек нужные буквы):

- Сәл...м, Артур!
- Һ...умы, Олег!
- Хәлдәрең нисек?
- Яҡш... . Һин ҡайҙа уҡыйһың, Олег?
- Өфө механика – технология колледжында.
- Ниндәй специальносҡа?
- “Дәүләт муниципаль идара итеү” специальносы буйынса
- Бик яҡшы икән. Ә мин Салауат индустрия колледжында уҡ...йым.
- Уҡыуы оҡшаймы?
- Эйе, бик оҡшай. Яр...й, Олег, һ...у бул.
- Һау бул, Артур.

**4-се бирем. Вариантлап эшләү.** Һүҙҙәргә синонимдар һәм антонимдар табығыҙ (к данным словам найдите синонимы и антонимы) **по образцу:**

| № | Һүҙ (слово) | Синоним | Антоним |
|---|---|---|---|
| 1 | йыраҡ (далеко) | алыҫ (далеко) | яҡын (близко) |

1- **се вариант:** матур, ҙур, йылы, аҡыллы, таҙа.
2- **се вариант:** яҡшы, бәләкәй, еүеш, егәрле, тиҙ.

**5-се бирем.** Өлгө буйынса ғариза яҙығыҙ (напишите заявление по образцу): 174 – 175 – се (176 – 177 –се) биттәр.

Стәрлетамаҡ тармаҡ – ара колледжы директоры ... ... төркөм студенты ... ...

ғариза.

11 -12 ноябрҙә ярыштарҙа ҡатнашыуым сәбәпле мине дәрестәрҙән ебәреүегеҙҙе һорайым.

10 ноябрь, 2021 йыл Подпись

**Биремдәрҙе башҡарғандан һуңстудент белергә һәм эшләй белергә тейеш:**

1.Һөнәрҙәр тураһында - уларҙың үҫеш юлын билдәләргә, һүҙбәйләнеш, һөйләм төҙөүҙең ысулдарын билдәләргә,

2.Һөйләмдәр төҙөү, һүҙҙәргә синонимдар, антонимдар табыу буйынса күнекмәләр булдырырға.

**Контроль һорауҙар һәм биремдәр (телдән):**

1.Башҡортостандағы ниндәй уҡыу йорттарында иҡтисадсы һөнәренә уҡыталар? 2.Башҡортостанда ауыл хужалығы белгестәрен ниндәй уҡыу йорттары әҙерләй? 3.Һеҙҙең буласаҡ һөнәрегеҙгә ҡараған ниндәй һөнәри лексиканы beләһегеҙ? Миҫалдар килтерегеҙ.

**Студенттарҙың үҙаллы эше өсөн биремдәр:**

Дәреслектән 167- 168 - се биттәр, Л.2.97 - 98 - сы бит. “Минең яратҡан һөнәрем” ижади эшен төҙөргә.

Уҡытыусы______________ Мөхөтдинова Ф.Р.